*Закир ӘКБӘРОВ,*
*«Заман» гәзитенең баш мөхәррире*

# Иҫке заводтың яңы хужаһы

Болдорға сығыу менән Нурғәлиев, ғәҙәтенсә, тирә-йүнгә күҙ ташланы. Әле ҡараңғы. Шабағыш ауылы йоҡлай. Ҡапҡа төбөндәге бағанала янған лампочка яҡтыһында тәңкә ҡарҙар өйөрөлә лә, ҡышҡы ауыл күренешенә бер аҙ йәнлелек өҫтәй. Әллә нисә көндәр инде ишелеп-ишелеп ҡар яуа. «Ҡышы былай башланғас, алла бирһә, йәйе лә насар килмәҫ, баҫыуҙарҙа дым етерлек булыр, иген уңыр», — тип уйлап алды Мөхәммәт Сәғитович, йәмле күренештән крәҫтиәндәрсә ғәмәли һығымта сығарып. Үҙе күңеленә беренсе килгән уйынан йылмайып ҡуйҙы: «Һаман да совхоз директоры булып фекер йөрөтәһең, иптәш Нурғәлиев. Хәҙерге эшеңдең һөҙөмтәләре игендең үҫеү-үҫмәүенә, малдарҙың көрлөгөнә бәйле түгел. Һин бит ике йыл инде комбинат директоры. Тәбиғәт хозурлығы менән былай ғына ла һоҡлана белергә ваҡыттыр». «Нисек инде бәйле булмаһын?! Комбинатыңдың төп бурысы шул иген түгелме ни?!» «Булһа һуң. Бында үҫмәһә, үҫкән ерҙәрҙән килтереп тултыралар уны. Игенсе икәнлегеңде онот, тирә-яҡтағы аҡлыҡҡа-паклыҡҡа күҙ һал...»

Нурғәлиев хистәргә бик үк бирелеп барыусан кеше түгел. Әммә кәйефе барҙа, ҡышҡы оҙон кистәрҙә, күңелендә үҙ-үҙе менән ошондайыраҡ һөйләшеүҙәргә лә юл ҡуйғылай. Ул инде шыйыҡ ҡына зәңгәрлеккә буяла барған ауыл күренешенә тағы бер иғтибар итте. Урман ҡаплаған тауҙар араһына һыйынып ултырған Шабағыш иҫ киткес



*М.С.Нурғәлиев*

йәмле, ошо ауыл уның күңеленә иң яҡын бер төбәккә әйләнгән.

Эшендә йыйылып киткән ҡағыҙҙарҙы бер тапҡыр күҙ уңынан үткәргәс, ингеләп-сыҡҡылаған хеҙмәткәрҙәренең йомоштарын йомошлап, кәрәк күрһәтмәләрен биргәс, ул тағы ла хисле уйҙарға сумды.

Мөхәммәт бала сағында: «Ике меңенсе йылда илле бер йәшлек ҡарт булам. Арғы өс Ғәбделсафа ҡарт кеүек кәкерәйеп таяҡҡа таянып йөрөрмөн микән, әллә Ғәзиз бабай кеүек түшәктә үк ятырмын микән?» — тип уйлай ине. Шуны хәтеренә төшөргәс, ул ирекһеҙҙән ҡаршы стеналағы көҙгөгә күҙ ташланы. Юҡ, әле ҡарт түгел ул. Артҡа ҡаратып тараған оҙон ҡара сәстәренә яңы ғына сал төшә башлаған, ҡара-көрән күҙҙәре төҫөн, ҡылыс танауы, ихтыярлы әйәге формаһын юғалтмаған. Баҙыҡ кәүҙәһен тура тоторға ла таяҡ кә-



10-2001.p65 20 30.10.01, 14:41

рәкмәй. Аяҡтары ергә ныҡ, хужаларса баҫып йөрөй. Кеше күҙенә тура ҡарап, хужаларса атлап йөрөү өсөн физик таҙалыҡ ҡына кәрәкме? Тормошта маҡсаттарыңды дөрөҫ ҡуя һәм шуларға ирешә белеү кәрәк. Бына тағы йыл үтә лә көҙ етә. Ә ирештеме һуң Мөхәммәт йәшләй ҡуйған маҡсаттарына?

1949 йылдың ҡара көҙөндә Саҡмағош районының ҙур булмаған Ҡара-Ерек ауылында колхозсылар Сәғит менән Мәстүрә ғаиләһендә тәүге бала булып донъяға килде ул. Саҡмағош ерҙәре нисек кенә уңдырышлы булмаһын, һуғыш осоро бөлгөнлөгөнән арынып етмәгән ауыл бик ярлы йәшәй ине әле: юҡбарҙан тигәндәй ҡоролған һалам түбәле йорттар, бәләкәй генә ситән һарайҙар, ихаталар... Бригадир кенәгәһенә һыҙыла барған таяҡ һыҙыҡтар ялына эшләп йөрөгән колхозсыларҙың өҫтәлдәре аҙыҡтан һығылып торманы. Тиңдәштәре менән Маңғаҙыла шаптырҙап, асығып ҡайтып ингәндә, өйҙә тамаҡ ялғарлыҡ ҡына икмәк киҫәге табылһа, малай шуға ла шат ине. Мөхәммәттең ғәмһеҙ бала сағы оҙаҡҡа һуҙылманы. Үҙенән һуң бер-бер артлы тыуған дүрт малайҙы ҡарашыу-тәрбиәләшеү уның елкәһенә төштө. Ярай әле әсәһе юҡҡа-барға ҡысҡырып-екеренеп бара торған заттарҙан түгел. Донъя мәшәҡәттәре сүпләп бөтмәҫлек булһа ла өлкән малайының башынан һыйпап алырға, «Эй, минең читауатым!» — тип арҡаһынан һөйөргә ваҡыт таба. Кәнсәләрҙә «шалт та шолт» счет төймәләре тартып ултырған хисапсы ул ваҡытта ауылда иң абруйлы кеше иҫәпләнгәнлектән, малайҙың иңбашына ҡанаттар үҫеп сыҡҡандай була. Мөхәммәттең бала саҡтан төрлө иҫәп-хисапты теүәл алып бара алыу һәләте, әсәһенең маҡтау һүҙҙәре билдәләгәндер әле уның тормош юлын. Ә, бәлки, улар ҙа түгелдер...

«Ауылда ҡалһаң, көтөү көтәрһең», — тип ҡурҡыталар ине бит ул ваҡыттарҙа. Ялланып ауыл көтөүен көтөүҙең «бар ләззәтен» үҙ елкәһендә татып үҫте Мөхәммәт. Ҡара-Ерек һигеҙ йыллыҡ мәктәбенең алтынсы синыфын тамамлаған йәйҙе үк был ҡамытты кейергә тура килде уға. Ҡыйын булды, ләкин түҙҙе, тырышты. Тырышлығы өсөн, аҡсалата ғына түгел, игенләтә лә, картуфлата лә түләнгән эш хаҡын теүәл иҫәпләп бара белеүе өсөн ауыл халҡы уны ихтирам итте. Яҙ етеп, көтөүсе эҙләй башлаһалар, тағы ла уны килеп саҡырыр булдылар. Тормош еңеүҙәрҙән һәм еңелеүҙәрҙән тора. Ауыр көтөүсе һөнәрен үҙләштереүҙе Мөхәммәт үҙенең тәүге еңеүҙәренең береһе тип иҫәпләне.

Ә икенсеһе... Һигеҙ йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, иптәштәренең ҡайһы берҙәре ауылда ҡалды, ҡайһы берҙәре күрше ауыл мәктәбенә юл алды. Шул ваҡыттан малай үҙ алдына мотлаҡ юғары белем алырға тигән маҡсат ҡуйҙы. Йыраҡ булһа ла, туғыҙынсы синыфҡа Мөхәммәт Дүртөйлөнөң икенсе һанлы урта мәктәбенә уҡырға китте. Тәүҙә синыфташтары малайҙың ватыҡ-емерек урыҫсаһынан көлөп маташтылар, ләкин уның математика, физика, химия кеүек фәндәрҙә тәрән йөҙөүе, мәсьәләләрҙе сәтләүек урынына ярыуы ихтирам уятты. Ә рус теле ни ул, зиһене теүәл, тел тамырҙары ҡатып етмәгән малай уныһына ла тиҙ өйрәнде.

Башҡортостан ауыл хужалығы институтының иҡтисад факультетына ул йылдарҙа күберәк ҡыҙҙар инә торғайны. Егеттәр агроном, инженер һөнәрҙәрен яҡынырак күрә. Был һөнәрҙәргә эйә булғандарының үҫеш юлы ла алдан билдәле: тәүҙә — «простой», унан һуң — баш, унан һуң — рәйес, йә директор. Эштәр уңай барһа, район етәксеһенә хәтле лә үрләргә мөмкин. Ә бухгалтер кем ул? Ҡағыҙ ҡорто, дебит-кредиттарға күмелеп ултырған бер бюрократ, совет осороның байтаҡ фильмдарындағы, әҙәби әҫәрҙәрендәге кире персонаж. Ләкин халыҡ аҡылы бит йәмғиәттең ваҡытлы идеологияһынан өҫтөнөрәк. «Аҡса иҫәпте ярата», тигән боронғо ата-бабаларыбыҙ. «Иҫәпте ҡоро тоторға» өндәгәндәр улар. «Иҫәпкә бар, һанға юҡ»тарҙан көлгәндәр. Мөхәммәт ауыл хужалығы производствоһының бухгалтер иҫәбе иҡтисадсыһы тигән һөнәр үҙләштерҙе. Насар үҙләштермәгәндер, юғиһә аспиранту-



10-2001.p65 21 30.10.01, 14:41

рағa тәкдим итеп ҡарамаҫтар, егет риза булмаған, курстан бер үҙен тип әйтерлек баш бухгалтер вазифаһына тәкдим итмәҫтәр ине. Ул ваҡытта бик һайланырға бирмәйҙәр, ҡайҙа ебәрәләр, шунда барырға тейешһең. Мөхәммәттең өлөшөнә Күмертау районының Мораптал совхозы эләкте.

Бик оҡшап етмәне йәш белгескә был яҡтар. Тәбиғәте Саҡмағоштоҡонан байтаҡҡа ҡырыҫыраҡ, таулы-соҡорло ерҙәренең дә ундырышлығы самалы. Совхоз үҙәгендә урыҫы ла, сыуашы ла, башҡорто ла, ҡаҙағы ла йәшәй тигәндәй.

Тик башы менән эшкә сумырға күнеккән егет был турала оҙаҡ уйланып, моңайып йөрөмәне. Районда ғына түгел, республикала иң ҙурҙарҙан һаналған хужалыҡтың иҫәп-хисабын яйға һалыу бик күп хеҙмәт талап итә ине. Тиҫтәнән артыҡ ауыл, утыҙ биш мең гектар ер, ошо ерҙә эшләгән мең ике йөҙләгән крәҫтиәндең мең төрлө мәшәҡәте, мең төрлө хәстәре. Егәрле етәксе Альберт Йосопов бүлексәләрҙән ҡайтып инмәй, бына шуларҙың күбеһе конторҙа ултырған Мөхәммәт Нурғәлиев елкәһенә төшә ине.

Етмешенсе-һикһәненсе йылдарҙа совхоз байтаҡ уңыштарға ирешә. Райондың хөкүмәткә тапшырған ауыл хужалығы продукцияһының иштән берен Мораптал совхозы етештерҙе. Ә иң әһәмиәтлеһе: был йылдарҙа бик күп социаль-мәҙәни объекттар сафҡа индерелде, юлдар төҙөлдө. Башҡорт халҡының милли батыры Кинйә Арыҫланов тыуған, бөтөү хәленә еткән бәләкәй генә башҡорт ауылы Кинйәабыҙҙы тергеҙеү, аяҡҡа баҫтырыу ошо йылдарға тура килә.

Тәғәйен булған өс йылын тултырып, тыуған яғына юл алманы Мөхәммәт, Көйөргәҙе ерендә төпләнеп ҡалды. Тормош иптәше Нина Михайловнаны ошонда тапты, улы Руслан менән ҡыҙы Лилиә ошонда донъяға килде. Инде лә тормош арбаһын тыныс ҡына пенсияға саҡлы Морaптал совхозында тартырға мөмкин ине. Ләкин ундай тыныс тормош Нурғәлиевтың фиғеленә тап килмәй.

Ул 1990 йылда Күмертау совхозына иҡтисад-финанс мәсьәләләре буйынса директор урынбаҫары булып эшкә күсте. Был махсуслаштырылған хужалыҡтың биш мең һыйыр малы һимертеүгә иҫәпләнгән комплексы бар. Директоры — әлеге көндә Башҡортостан ауыл хужалығы министрының беренсе урынбаҫары Фәрит Сиражетдинов. Ҙур хужалыҡта ун алты йыл тәжрибә туплап өлгөргән Нурғәлиев ҡыйынлыҡтарҙан ҡурҡмай.

Күмертау мал һимертеү комплексының республикалағы комплекстар араһында иң алдынғылар рәтенә сығыуы ла тап Фәрит Сиражетдинов менән Мөхәммәт Нурғәлиев эшләгән йылдарға тура килә. Бында һимертелгән малдарҙың һаны ете меңгә саҡлы етте, көндәлек артым бер килограмдан юғарыраҡ, ит комбинатына оҙатылған һәр башмаҡтың ауырлығы дүрт йөҙ илле-биш йөҙ килограмға етә ине. Тотороҡло эшләү совхозға ҡараған ауылдарҙың социаль йөҙөн киҫкен үҙгәртергә мөмкинлек бирҙе. Совхоз үҙәгендә, бүлексәләрҙә йөҙҙәрсә яңы йорттар, мәктәптәр, балалар баҡсалары үҫеп сыҡты, асфальт юлдар төҙөлдө, йорттарға газ үткәрелде.

1996 йылда, Фәрит Сиражетдинов Өфөгә күскәс, етәкселәрҙең фекере бер булды: ҙур, ҡатлаулы хужалыҡты Нурғәлиев ҡына етәкләй ала. Был инде производствоны производственниктар ғына етәкләргә тейеш тигән хата фекерҙән арына барыуҙың бер сағылышы ине. Нурғәлиев ҙур хужалыҡтың иҡтисади сәйәсәтен дөрөҫ билдәләүсе белгес, талапсан етәксе булып өлгөргән кеше. Ул үҙе лә бер нәмәне яҡшы аңлай: етәксе йәмғиәттең дә, айырым предприятиеның да иҡтисади үҫеш закондарын яҡшы белергә тейеш.

Ғәҙәти булмаған шарттарҙа өс йыл директор йөгөн тартты Нурғәлиев. Йөҙөнә ҡыҙыллыҡ төшөрмәне, совхоз малсылыҡ һәм игенселек буйынса алдынғылар рәтендә булды. Бына шулай эшләр ҙә эшләр ине. Ләкин 1999 йылдың башында Нурғәлиевҡа яңы тәкдим яһалды: Көйөргәҙе спирт-араҡы комбинатының директоры булып күсергә.

Көтөлмәгән тәҡдим. Мөхәммәт Сәғит улы — ауыл хужалығы иҡтисады белгесе, спирт-араҡы комбинаты — эсемлек етештереүсе производство. Тик уныһы әле бер хәл, яңы түгел бит, бик боронғо предприятие.

Кавказ халыҡтарын буйһондороуҙа күрһәткән хеҙмәттәре, ҡанһыҙлығы өсөн немец сығышлы урыҫ генералы Ипполит Матвеевич Шоттҡа батша башҡорт ерҙәренән етмеш мең десятина өлөш сығара. Шотт Ермолаевола һәм Туғыҙтимерҙә спирт заводтары төҙөй, ерҙәренә ашлыҡ сәстерә, картуф ултырттыра. Йыйылған уңыштан спирт етештереп, ҙур байлыҡтар туплай.

Бына шул 1868 йылдан эшләй башлаған завод тәҡдим ителә лә инде Мөхәммәт Сәғит улына. Дөрөҫ, һуңғы йылдарҙа унда байтаҡ ҡына ремонт эштәре башҡарылды, үҙгәрештәр индерелде. Спирт ҡына етештереп көн күргән заводта араҡы линияһы сафҡа ебәрелде, ул «Көйөргәҙе» спирт-араҡы комбинаты тип атала башланы. Тик ниңәлер әллә ни нығынып китә алманы, алынған табыштары, уларҙан район бюджетына ингән өлөштәр ҙә наҡыҫ ҡына булды.

Тиҙ арала иҫке заводты ҙур табыштар килтерә торған заманса предприятиеға әйләндереү өсөн Нурғәлиевтың юғары иҡтисади белеме, егерме алты йыллыҡ хеҙмәт тәжрибәһе лә кәрәк. Әйткәндәй, ул инде Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре исеменә эйә, күптән түгел иҡтисад фәндәре кандидаты ғилми дәрәжәһенә диссертацияһын да уңышлы яҡлаған ине. Ләкин унан бит фәнни консультация ғына өмөт итмәйҙәр. Ул был эште үҙе эшләргә тейеш.

Иҫерткестең хеҙмәт тәртибенә йоғонтоһо тураһында аңлатып тороу кәрәкмәй. Етәксе иң тәүҙә барлыҡ эскеселәрҙән арынды, цехтарҙа ҡаты тәртип урынлаштырҙы. Урынбаҫарҙарын, белгестәрҙе ваҡ иләктән үткәрҙе. Сығарыла башланған ике сорт араҡы әле ҡулланыусыларҙың күңелен яуламаған, республикала танылған Өфө, Стәрлетамаҡ, Бәләбәй, Бөрө араҡылары менән ярыша алмай. Продукцияның сифатын күтәреү, уның яңы сорттарын үҙләштереү, яҡын һәм йыраҡ сауҙагәрҙәр менән бәйләнештәр урынлаштырыу, шешәләрҙең тышҡы биҙәлешен камиллаштырыу — барыһы ла иғтибар үҙәгендә булды. Араҡы ҡойоу буйынса тағы бер линия сафҡа индерелде, сувенир эсемлектәр цехы эшләй башланы, тирә-яҡ ҡалаларҙа фирма магазиндары асылды. Йыйып ҡына әйткәндә, Нурғәлиев планлы хужалыҡ итеү ҡалыптарынан арынып бөтә алмаған предприятиены баҙар иҡтисады, ҡырыҫ конкуренция шарттарына яраҡлаштыра барҙы. Бер йыл барышында продукция етештереү һәм уны ҡулланыусыларға һатыу өс тапҡырға артты. Комбинат хөкүмәткә налогты элек 30 млн. һум күләмендә түләһә, әле 224 млн. һум. Был өс район бюджетына бәрәбәр. Ә Көйөргәҙе районы бюджетының 80 проценты спирт-араҡы комбинаты өлөшөнә төшә.

Етәксене күләмгә ҡарағанда сифат мәсьәләһе нығыраҡ ҡыҙыҡһындыра. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Ермолаево араҡыһы республикала ла, унан ситтә лә танылыу тапты. Эсемлектең сифаты өс нәмәгә бәйләнгән, тип иҫәплэй Нурғәлиев: спиртҡа, һыуға һәм күңел биреп башҡарған тырыш хеҙмәткә. Тәүгеһе, игендән генә эшләнгән күҙ йәшеләй таҙа спирт — элек-электән Ермолаевоның ғорурлығы. Уның күпселек өлөшө медицинаға, фармацевтикаға, парфюмерияға китә. Хәрби сәнәғәтселәр ҙә был сеймалһыҙ эшләй алмай. Икенсе компонент — һыу. Ермолаево һоро күмер ятҡылығы өҫтөндә төҙөлгән. Ә унан да аҫта — ҙур ер аҫты күле. Ғалимдар билдәләүенсә, торф, йәки һоро күмер аша һөҙөлөп сыҡҡан һыу иң таҙаһы иҫәпләнә. Ә тырыш хеҙмәткә килгәндә инде, быныһы директорҙың коллективты туплай, уны еңеүҙәргә илһамландыра белеүенә бәйле.

Бөгөнгө көндә «Көйөргәҙе» спирт-араҡы комбинаты һигеҙ төр араҡы сығара. Әле улар төрлө кимәлдәге күргәҙмәләрҙә утыҙҙан артыҡ диплом менән бүләкләнгәндәр, бер ба-

ҡыр, ун ете көмөш, туғыҙ алтын, бер платина миҙалға лайыҡ булғандар.

Был уңыш менән ҡотларға ингән иптәштәре: «Йә, Мөхәммәт дуҫ, инде камиллыҡтың юғары баҫҡысына менеп еттең. Хәҙер инде аҫҡа ҡарап төкөрөп утырһаң да була», — тип шаярттылар. «Була инде, була...» — тип яуап бирҙе Нурғәлиев шаярыңҡырап. Ләкин иптәштәре лә, үҙе лә яҡшы белә: ул нимәгәлер ирешеп тыныслана торған кеше түгел. Әгәр ҙә быйыл «Көйөргәҙе» спирт-араҡы комбинаты Башҡортостандың иң яҡшы йөҙ предприятиеһы исемлегенә ингән икән — был бит әле сираттағы баҫҡыс ҡына. Юғары сифатлы продукция өсөн XVIII Халыҡ-ара конвенцияла яуланған халыҡ-ара алтын сифат знагы ла һуңғыһы булмаҫ, моғайын.

Әлеге көндә спирт етештереүҙе реконструкциялау, барлыҡ технологик ағымды автоматлаштырыу эштәре алып барыла. Иҫерткесһеҙ эсемлектәр цехы продукцияһын арттырыу буйынса саралар күрелә. Әле бында «Көйөргәҙе» һыуы тултырыла, ике төрлө квас етештерелә. Һигеҙ градуслы «Серебряный звон» джин-тонигы етештереүҙе үҙләштерҙеләр. Шулай булғас, комбинатта эшләүселәрҙең һаны йөҙ туҡһандан дүрт йөҙ егермегә саҡлы артып китеүе лә ғәжәп эш түгел. Бөгөнгө көндә кешеләрҙе яҡшы хеҙмәт хаҡы ала торған эш менән тәьмин итеү — үҙе бер ҙур социаль ҡаҙаныш. Үҙған йыл Көйөргәҙе районы гәзите Нурғәлиевҡа юҡҡа ғына «Йыл кешеһе» исемен бирмәне бит. Әлеге көндә йыраҡтараҡ йәшәгәндәрҙе эшкә комбинат автобусы ташый. Цехтарҙа йылы, яҡты, таҙа. Эшселәр ваҡытында махсус кейем менән тәьмин ителә. Комбинаттың заманса йыһазландырылған үҙ магазиндары, «Алтын ҡурай» кафеһы бар.

Үтәнеме һуң етәксе был коллективта үҙ бурыстарын, алдына ҡуйған маҡсаттарын? «Үтәнем», — тип өҙөп кенә әйтеп бармаҫ ул. Артылыштар һаман унаң өсөн алда көтә.






10-2001.p65 24 30.10.01, 14:41